Тема: ***«Алтын көҙ килә еремә» Йомғаҡлау дәресе.***

(3 класс)

Р.Ә.Яппарова
Рощинский урта мәктәбенең
башҡорт теле уҡытыусыһы

Рощинский мәктәбе

Тема: Алтын көҙ килә еремә. Йомғаҡлау дәресе.

Маҡсат: 1) “Алтын көҙ килә еремә” темаһы буйынса алған белемдәрен системаға һалыу, конкретлаштырыу;
2) Уҡыусыларҙың телмәр күнекмәләрен үҫтереү;
3) Тәбиғәткә һөйөү, күҙәтеүсәнлек, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: көҙ тураһында һүрәттәр, ағастар тураһында кроссворд, карточкалар, фонояҙма, кипкән япраҡтар.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу мәле.
II. Төп өлөш.

1. Фонетик күнегеү. 19 бит

-Тирә яҡҡа көҙ апай
Һипте һары буяуын:
Һары урман, һары тау
Алып тора күҙ яуын. (М. Дилмөхәмәтов.)

- Был шиғырҙа ниндәй йыл миҙгеле тураһында әйтелә?

2. Яңы тема.

Дәрестең темаһын плакаттан бергәләп уҡыу.

Бөгөн дәрестә көҙ миҙгеле тураһында һөйләшербеҙ, үтелгәндәрҙе ҡабатларбыҙ.

1) Шиғырҙы тасуири уҡыу. Көҙ биҙәктәре. (Ф. Рәхимғолова.) 30 бит.

- Был шиғырҙа нимәләр тураһында әйтелә?

- Эйе, көҙ көнө ағастарҙың япраҡтары төрлө төҫтә була. Әкрен генә иҫкән елгә лә улар елбәҙәктәр кеүек ергә ҡойолоп төшәләр. Беҙҙең класс таҡтаһында ла төрлө төҫтәге япраҡтар йәбештерелгән. Уларҙа дәрестең планы яҙылған.

2) Бына беренсе япраҡ өҙөлөп төштө.Унда “Көҙгө тәбиғәт” тип яҙылған.

- Һүрәттәргә ҡарап тәбиғәттәге көҙгө үҙгәрештәр тураһында һөйләмдәр төҙөү.

- Китап менән эш. 46 бит 46-сы күнегеү. Бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөп яҙыу.

- Йомаҡтар сисеү.

Ҡырҙар буш ҡала,
Ямғырҙар яуа,
Ерҙәр дымлана
Был ҡайсаҡ була? (Көҙ.)

Үҙе илай – үҙе һыйлай. (Көҙ.)

Күктән килде, ергә китте. (Ямғыр.)

Аяҡһыҙ – ҡулһыҙ ҡапҡа аса. (Ел.)

Үҙе туҡ кеүек, ҡайғыһы юҡ кеүек,
Илай башлаһа туктамай. (Көҙгө ямғыр.)

Аяғы юҡ – гиҙә,
Күҙҙәре юҡ йәш түгә. (Болот.)

Көҙ сисенә, йәй кейенә. (Ағас.)

- Кроссворд сисеү. Таҡтаға кипкән япраҡтар һәм хәрефтәр йәбештерелгән. Ағастарҙың япраҡтарын дөрөҫ тапһағыҙ, бер һүҙ уҡырһығыҙ.
(Б а ш ҡ о р т о с т а н)
- Эйе, был ағастар барыһы ла беҙҙең Башҡортостанда үҫә. Урман - ҙур байлыҡ. Уны һаҡларға кәрәк.

3) Икенсе япраҡ өҙөлөп төштө. Унда “Ҡоштарҙың һәм хайуандарҙың тормошондағы көҙгө үҙгәрештәр”тип яҙылған.

- Ҡоштарҙың исемдәрен ҡабатлау. Күсмә һәм ҡышлаусы ҡоштарҙы билдәләү.
- Р Сәлмәнов муз.”Ҡоштар китә” йырын йырлау.
- Урманда тағы ла нимәләр йәшәй? Улар ҡышҡылыҡҡа нисек әҙерләнәләр икән?

4) Өсөнсө япраҡ өҙөлөп төштө. Унда “Көҙгө эштәр”тип яҙылған. Көҙ көнө кешеләрҙең тормошонда ниндәй үҙгәрештәр була икән?

- Картина буйынса эш.
- Ә беҙҙең мәктәп баҡсаһында ниндәй йәшелсәләр үҫә? Әйҙәгеҙ шуларҙы йыйып кәрзингә һалайыҡ.
- Ололарҙың көҙгө эштәре тураһында һөйләшеү. Һорауҙарға яуаптар. 40 бит 40 күнегеү. Икмәк ҡәҙере тураһында әңгәмә.
- Мәкәлдәрҙе аңлатыу. Икмәк – табын ҡояшы. Эшең булһа йөҙ, туҡлыҡлы килер көҙ.

5) Ял минуты.

С. Муллабаевтың “Болот” шиғырын хәрәкәттәр менән һөйләү.

Елбер-елбер
Елдәр иҫә.
Елдәр менән
Болот күсә.
Йөрөй-йөрөй
Тау-тау болот,
Яуҙы көмөш
Тамсы булып.
Тамсы түгел
Орлоҡ сәсте:
Ҡырҙа алтын
Башаҡ үҫте.

6) Дүртенсе япраҡ өҙөлөп төштө. Унда “Көҙ тураһында шиғырҙар” тип яҙылған.
Уҡыусылар көҙ тураһында шиғырҙар һөйләйҙәр.

Көҙ килгән.

Көҙ килгән, көҙ килгән,
Көҙ быйыл бик тиҙ килгән.
Ҡайындар, тирәктәр, талдар
Һарынан күлдәк кейгән.

Көҙ килгән, тиҙ килгән,
Тиҙ килгәнен кем белгән
Көҙ бит һорап та тормаған?
Баҡсаға барып ингән.

(Г. Юнысова.)

Көҙ.

Сыбар балаҫтай
Аҡлан өҫтәре.
Аңҡымай хәҙер
Сәскә еҫтәре.

Йәй йәмле булһа,
Емеше менән,-
Ә көҙ бик күркәм
Уңышы менән.

(С. Муллабаев.)

Көҙгө урман йыры.

Алтын сәсен тарап үреп,
Һары күлдәген кейеп,
Көҙбикә ҡунаҡҡа килде
Урманға йырлап – бейеп.

(З. Ҡотлогилдина.)

Беҙҙең баҡса.

Беҙҙең баҡса ҙур түгел,
Ҙур булмаһа ла – матур.
Унда үҫә еләк – емеш,
Ҡыяр, кишер,помидор.

(З. Шәйхетдинова.)

Көҙ килде.

Моңһоуланды урмандар,
Һарғайҙы ҡырҙар өҫтө.
Йылға – күлдәр топ – тоноҡ –
Көҙ килде бит, көҙ килде.

Баҡсабыҙға көтмәҫтән
Ниндәй алтын төҫ керҙе.

Япраҡтар яуҙы юлға –
Көҙ килде бит, көҙ килде.

Килһә ни, килһен әйҙә,
Яратам алтын көҙҙө…
Мәктәп, класс, парталар
Һағынып көтә беҙҙе.

(М. Ғәли.)

## III. Йомғаҡлау.

- Дәрестә нимәләр эшләнек?
- Уҡыныҡ, яҙҙыҡ, йомаҡтар систек, һөйләмдәр төҙөнөк, шиғырҙар һөйләнек, йыр йырланыҡ.

## IV. Өй эше. Көҙ тураһында һүрәт төшөрөргә.

## V. Баһалау.